*Закир ЗИННӘТУЛЛИН*

# Силәбелә ҡала ҡоролтайы

Силәбе ҡалаһы башҡорттарының II ҡоролтайы, унан һуң үткәрелгән өлкә ҡоролтайы кеүек үк, иң тәүҙә ойошмаға яңы лидер килеүе менән айырылып торҙо. Башҡарма комитеттың элекке рәйесе Алһыу Рамазан ҡыҙы Сирғәлина Өфөгә күсеү сәбәпле, уҙған йыл аҙағында был вазифаға Сәхрәгөл Абдулла ҡыҙы Ғатауллина тәҡдим ителгәйне, ҡоролтай иһә был кандидатураны бер тауыштан раҫланы. Резолюцияға ингән иң мөһим пункттарҙың береһе булып Силәбелә башҡорт гимназияһы асыу маҡсаты ҡала. Йәнә бер мөһим мәсьәлә — Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тапшырыуҙарын трансляциялау. Ҡоролтай резолюцияһында, 1918 йылда Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте ваҡытлыса Силәбелә урынлашыуын иҫәпкә алып, ҡала урамдарының береһенә Зәки Вәлиди исемен биреү тәҡдиме лә күтәрелә.

# Парламент яҡлауына мохтаж

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының 21 мартта йыйылған ултырышында мәктәптәрҙә православие дине һәм мәҙәниәте нигеҙҙәрен өйрәнеү перспективаһы тикшерелде. Мәсьәлә буйынса Башҡарма комитет ағзаһы, БР Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты Рәшиҙә Искәндәр ҡыҙы Солтанова белдереү яһаны. Ултырышта ҡатнашыусылар Рәсәй Федерацияһын милләттәр, республикалар мәнфәғәттәре менән иҫәпләшмәй ҡоролған унитар, ғәмәлдә фәҡәт рус дәүләтенә әйләндереүгә ынтылыш көсәйгәндә, Башҡортостан Республикаһы, башҡорт халҡы һәм уның ижтимағи ойошмалары, республика парламенты, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһына Башҡортостандан һайланған депутаттар, башҡа милли республикаларҙағы, федераль үҙәктәге прогрессив көстәр менән берләшеп, бындай амбицияларға, айырым сәйәсмәндәрҙең шовинистик рухтағы, республикаларҙы юҡ итеүгә, милләттәрҙең үҫешен сикләүгә йүнәлтелгән сығыштарына, агрессив идеяларын киң информация саралары аша даими таратыуына ҡаршы торорға, ундай хәүефле провокацияларға барыусыларҙы, ғәмәлдә федератив дәүләтте тарҡатыуға саҡырыусыларҙы яуапҡа тарттырыуҙы талап итергә тейеш, тип билдәләне.

Ҡоролтай Башҡарма комитетының йәштәр советы ағзалары, милләт хоҡуҡтарын эффектлы яҡлау маҡсатында иң юғары, хатта халыҡ-ара хоҡуҡ кимәлендә эшләй алырлыҡ юрист кадрҙарын әҙерләү өсөн талантлы башҡорт йәштәрен Көнбайыш илдәренең иң абруйлы университеттарында уҡытыу көнүҙәк мәсьәләгә әйләнә, тип күрһәтте. Йәштәр советы ошо йәһәттән Саха-Якут һәм Татарстан республикалары тәжрибәһе өлгө булырлыҡ, тип билдәләй. Мәҫәлән, якуттарҙа йыл һайын 100-ҙән ашыу кеше АҠШ, Көнбайыш Европа университеттарына уҡырға ебәрелә, квотаға ингәндәрҙең исемдәре, аҙаҡ ҡайҙа эшкә урынлашыуы матбуғатта күрһәтелеп килә. Йәштәрҙең фекеренсә, беҙҙә лә был мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү талап ителә.